Һаумыһығыҙ ҡәҙерле ултырышта ҡатнашыусылар!

Мин Мәксүтова Гөлшат Ирғәле ҡыҙы, балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.

Быйылғы уҡыу йылында беҙҙең балалар баҡсаһына 17 бала списокта тора. Шуларҙың 12-13 бала көндә йөрөй. Монасип ауылынан 4 бала списокка ингән, өсәүһе яҡшы йөрөй.

Питание РОНО аша эшләнә. Оплата буйынса замечаниялар юҡ. Ата-әсәйҙәр яйлап түләп баралар. Эш ваҡыты 8-5 саҡлы, 2 кеше эшләйбеҙ. Садикка хас режимды теүәл үтәргә тырышабыҙ. Балалар менән төрлө сараларҙан ситтә ҡалмаҫка тырышып йөрөйбеҙ. Иртәлектәрҙә, байрамдарҙа, субботниктарҙа актив ҡатнашабыҙ. Быйылғы йылда йоҡо бүлмәһен астыҡ. Был эштәрҙә Р.Фәрит улына һәм Семеновский рудникка, үҙебеҙҙең ата-әсәйҙәргә, өләсәй – ҡартатайҙарға ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ һәм Юнусбаев Фәрит менән Ульябаев Айнур ағаәҙарға. Һәр ваҡыт Рәсүл Фәрит улы бер ваҡытта ла юҡ тип әйтмәй, барлыҡ этәрҙә ярҙам ҡулы һуҙа.

Ауыл хакимиәтенең эшен ҡәнәғәтләнерлек тип уйлайым.